ҺИНЕҢ КЕШЕЛӘРЕҢ, НЕФТЕКАМА!

# Йырлап йәшәүҙәре бер ғүмер!

Зилә АҘНАБАЕВА, БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт эшмәкәре

**...Ултырғысҡа менеп бер бәләкәй малай кисә генә отоп алған матур йырын һуҙа. Сәхнәһе лә сәхнәһе! Уратып алған тамашасылары ла уға ҡушылып көйләй кеүек. Бәләкәй генә кешелә шундай йомшаҡ моң ҡайҙан килгән икән?**

Ауылдаштары Раянды юҡҡа ғына "артист" тимәйҙәр. Киләсәктә ултырғыс түрен оло сәхнәләр алыштырыр, профессиональ артист булып киткән Раяндың йырлауын халыҡ түҙемһеҙләнеп көтөп алыр ...

Башҡортостандың иң гүзәл төбәктәренең береһе – Бөрйән районы Тимер ауылында Мырҙабай һәм Фәриҙә Алтыншиндар ғаиләһендә Раян алтынсы бала булып донъяға килә. Был ауылда әсәйҙәр сабыйҙарын бәүелткәндә ябай бишек йырын ғына йырламай, боронғо моңдарҙы көйләй. Халыҡ моңона һөйөү бала күңеленә ҡурҡаҡ һөтө менән инә. Иген иккәндә, мал көткәндә, бала баҡҡанда, офоҡҡа батыусы ҡояшты ҡуҙәткәндә лә йыр һуҙыу – Тимер ауылы халҡы өсөн ғәҙәти хәл.

Ана шулай иҫ киткес бай күңелле, моңло ғаиләлә тәрбиәләнә Раян. Ауылдаштары кескәй Раяндың илауын түгел, йырлауын күберәк ишетә инек, тиҙәр. Өс йәшенән "артист" булып йырлай башлаған "егет", әлбиттә, мәктәпкә төшөү менән, иң популяр шәхескә әүерелә. Төрлө кимәлдәге конкурстар, бәйгеләр, фестивалдәрҙә ҡатнашыу, маҡтаулы урындар яулау, Раяндың күңеленә ҡанат ҡуя, ул артабан йырсы һөнәрен һайлау тураһында уйлана башлай.

Әммә хозур, гүзәл тәбиғәтле Бөрйәнен ташлап китәһе килмәй, етмәһә, Өфө алыҫ, ҡала шаушыуы, тормошо ситен кеүек. Мөмкин булһа, оҙон көйҙәрен көйләп, Бөрйән урмандарында, йә бесәнгә, йә ауға, йәки балыҡҡа ғына йөрөр ине...

Ул ваҡытта район Мәҙәниәт һарайында эшләп йөрөгән, хәҙер инде республикабыҙ йыр сәнғәтенең якты йондоҙо Әлфиә Юлсурина, Раяндың артабанғы яҙмышын үҙгәртерлек кәңәш-тәкдим яһай: "Һинең урының тик сәхнәлә, йыр донъяһында!" – ти ул. Ысынлап та, йырһыҙ йәшәй алмағанын белеп, йәш егет Өфөгә, сәнғәт училищеһының йыр бүлегенә юл тота.

Йыр донъяһында үҙен һынап ҡараусылар, әлбиттә, бик күп була. 150 абитуриенттың ун бише генә вокал нескәлектәрен өйрәнә башлай. Тырыш егетте уҡытыусылар ҙа яратып өлгөрә. Алдан килеп, әҙерләнеп тороусы студентына уҡытыусы-педагог Джон Мусин бар маһирлығын һала.

Репертуары өҫтөндә ҡанатланып эшләй Раян. Халыҡ йырҙары был исемлектең нигеҙен тәшкил итә. Үҙенсәлекле, бай, сағыу тауышлы, тыны оҙон, диапозоны киң егетте сәхнә белгестәре тиҙ күреп ала. Заманса йырҙарҙы башҡарыусылар бихисап булһа ла, халыҡ йырҙарын еренә еткереп, аңлап башҡарыусылар шулай ҙа тулып ятмай шул. Башҡорт халыҡ йырҙарын тик уға ғына хас нескәлектәре менән башҡарыусы егетте шул йылда Сибай ҡалаһында асылған филармонияға эшкә саҡыралар. Унда эшләй башлауына күп тә үтмәй, ҡалала Өфө дәүләт сәнғәт училищеһының филиалы асыла. Раянға йыр сәнғәтенең "алтын тауышы" Камил Вәлиевтың класында белем алыу бәхете тейә. Училищены тамамлау менән, йәш йырсыны Бәләбәйгә, йыр сәнғәтен күтәрергә ебәрәләр. Әммә күп тә үтмәй, яңы ғына асылған Нефтекама дәүләт филармонияһы етәкселеге Раянды үҙенә эшкә саҡыра.



Р. Никонов фотоһы.

Моңло йырын һуҙа Раян.

Йәш йырсы был ваҡытта инде күп кенә конкурс, бәйгеләрҙең еңеүсеһе, лауреаты, дипломанты исемдәренә лайыҡ булған, танылған артистарҙың береһенә әүерелә. Уға шунда уҡ мәҙәниәт усағының башҡорт төркөмөн етәкләү бурысын йөкмәйҙәр. Эшһөйәр, булдыклы егет матур, ижади, эшлекле коллектив туплай. Әлбиттә, тәүге мәлдә еңелдән булмай: костюмдар, музыка ҡоралдары етешмәй, өҫтәүенә Мәҙәниәт министрлығы тарафынан бирелгән планды ла үтәргә кәрәк. Шулай итеп, Раянға бер үк ваҡытта төркөм етәксеһе лә, администратор ҙа, йырсы ла булып эшләргә тура килә.

Егәрле, ижади ҡарашлы егет бирешмәй, бар йөрәген һалып эшкә тотона. Ә тырышлыҡ һөҙөмтәһеҙ үтмәй.

Ошо көндәрҙә 35 йәше тулыу айҡанлы үткәргән концертына Раян Мырҙабай улы матур һөҙөмтәләр менән килде. Үҙе етәкләгән үҙенсәлекле, матур тауышлы, һәләтле артистары булған "Кәрҙәштәр" төркөмөн бар сағыулығы менән тамашасыға күрһәтә алды. Төркөмдөң оҫта йырсылары Иршат Ҡарасурин, БР-ҙың атҡаҙанған артисы Альберт Салауатов, Зәбирә Әминева, Сулпан Ғәфүрйәнова, Илгиз Минәхмәтов, виртуоз-баянсы Марс Ишморатов һәм башҡаларҙың сығышын тамашасы көслө алҡыштар менән ҡаршыланы. Раян Алтыншин, Альберт Салауатовтар башҡарыуындағы халыҡ йыры "Буранбай" программаның йөҙәк ҡашы булып торҙо, тамашасы күңеленә айырыуса хуш килде.

Раян Мырҙабай улының күңеле лә халыҡ йырҙары кеүек киң һәм матур. Кеселекле, кешелекле, шулай ҙа башҡорт ир-егеттәренә генә хас батыр, бөтмөр егет "халкым" һәм "халҡым өсөн" тип янып йәшәй. Йырсы киләсәктә халкыбыҙҙың бөгөнгө шәхестәрен, улар эшмәкәрлеген сағылдырыусы ижади программалар әҙерләргә ниәтләй. Бынан тыш та бик күп идеялар, ниәттәр менән янып йәшәй Раян Мырҙабай улы. Уларҙың тормошҡа ашасағына шик юҡ.

Филармониябыҙҙың шундай профессиональ, үҙенсәлекле тауышлы йырсылары булыуы менән һоҡланмау мөмкин түгел!

НИСЕК ЙӘШӘЙҺЕҢ, МӘКТӘП?

# Ғилми эш – тимәк ижади эш

Гөлфирә БАЙБУЛАТОВА, БДУ-ның Нефтекама филиалы өлкән уҡытыусыһы, филология фәндәре кандидаты

**Билдәле булыуынса, йыл һайын, ҡышҡы каникулдарҙан һуң, ҡала-районарҙа ғилми-ғәмәли конференциялар үткәрелә. Шуныһы ҡыуаныслы – бына инде бер нисә йыл рәттән башҡа предметтар менән бергә уҡыусылар башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән дә конференцияларҙа сығыш яһай.**

Беҙ, Башҡорт дәүләт университетының Нефтекама филиалы уҡытыусылары, унда эксперт буларак та, жюри ағзаһы буларак та ҡатнашабыҙ. Минең үҙемә иһә был ауыр ҙа, яуаплы ла миссияны йыл һайын тиерлек башҡарырға тура килә. Яуаплы, сөнки – һәр бала үҙенә айырым бер шәхес. Уларҙың береһенең дә күңелен ҡырғы, ҡаты бәрелеге килмәй. Һәр эштең үҙенсәлеге, уның артында баланың хеҙмәте торғанын күрәһең. Ауыр, сөнки күп осраҡта, бирелгән тәҡдимдәр, әйтелгән иҫкәрмәләр, яһалған киҫәтеүҙәрҙе дөрөҫ аңламаусылар бар.

Конференцияла сығыш яһар өсөн тема һайлау – мөһим моменттарҙың береһе булып тора. Һуңғы йылдарҙа күп кенә уҡыусылар «Минең шәжәрәм» темаһына ныҡлы урын бирә. Республикабыҙ хөкүмәте тарафынан «Республиканың район-ҡалаларында, ауылдарҙа шәжәрә байрамдары үткәреү тураһында» закон ҡабул ителгәйне, быны тап шуның менән бәйле, тип ҡарарға урын бар. Был беренсенән. Икенсенән, был теманы, тимәк, бала уҡытыусы-етәксеһе менән берлектә һайлаған. Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән «Минең шәжәрәм» темаһы фәнни-ғәмәли конференция темаһы була аламы? Бәхәсле һорау. Шәжәрә – ул тарих, унда иң беренсе сиратта, ғаилә, быуындар, ата-бабалар тарихы сағыла. Шәжәрә төҙөүҙә, һис шикһеҙ, тикшеренеүҙең роле ҙур, тимәк, уны тикшеренеү эше тип атарға урын бар. Әгәр шәжәрә төҙөүсе архивтарҙа ултырып, ғилми материалдар менән эш итеп, уларҙы асыҡлауҙа үҙе лә ниндәйҙер өлөш индерһә генә, ғилми эш тураһында һүҙ йөрөтә алабыҙ.

Быйылғы ғилми-ғәмәли конференцияла туғыҙ сығыштың өсөһө шәжәрә темаһын яктыртһа, өсөһө Ш.Бабич шиғырҙарының тел-стиль үҙенсәлегенә, икеһе «Һ. Дәүләтшинаның «Ырғыҙ» романында ымлыктарҙың ҡулланылышы» һәм береһе «М.Ғафуриҙың «Кара йөҙҙәр» повесында тел үҙенсәлектәре» темаларына арналғайны.

Ғилми-ғәмәли конференция комиссия ағзалары уҡыусыларҙан тикшереү эштәренең предметын һәм объектын, ғилми яңылығын асыҡ әйтеп биреүҙе талап итә. Был уҡыусылар өсөн ауырлыҡтар тыуҙырған этапта етәксенең ярҙамы мөһим. Практика күрһәтеүенсә, уҡыусыларҙың эшенә дөйөм талаптар етешмәй.

Бөгөн уҡыусыны төрлө мәғлүмәт ресурстары, сығанаҡтар аша үҙ аллы белем алыуға ылыҡтырыу, Интернет ресурстарын дөрөҫ файҙалана белергә өйрәтеү мөһим. Тап сығанаҡтарҙы дөрөҫ файҙалана белмәү арҡаһында, тегенән-бынан урыҡ-һурыҡ күсерелгән эштәр барлыҡҡа килә лә инде. Уҡыусыға ярҙам кәрәк булған сакта, уҡытыусы һәр ваҡыт әҙер торорға тейеш. Тапҡан материалға баһа биреү, уны үҙе тикшергән проблема күҙлегенән ҡарап, өйрәнеү кәрәк. Уҡытыусы эшкә баһа ғына бирә, ә һығымтаны уҡыусы мотлаҡ үҙе сығара. Нисек кенә булмаһын, был уның ғилми эше, һәм бында уҡыусының фекере мөһим. Уҡытыусылар шуны онотмаһын ине.

# Эҙләнеүҙәр юлында

Алһыу ХАФИЗОВА, татар теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы

*Киләсәккә айык карар*
*Үз тарихын анык белгән.*
*Хәтерләүдән куркма һин,*
*Үткәнеңде онотма һин.*

Уҡыусыларҙың татар теле буйынса фәнни-ғәмәли конференцияһын 4-се мәктәп уҡыусыһы Руслан Нәбиев Р.Фәйзуллиндың ошо шиғыр юлдары менән башлап ебәрҙе. Руслан уҙған йылғы конференцияла беренсе урынды яулағайны, шуға ла ул быйыл тиҫтерҙәштәренә үҙенең теләктәрен еткерҙе һәм тәжрибәһе менән бүлеште.

Яҙма иҫтәлектәр булмаған дәүерҙән үк кешеләр үҙҙәренең ата-бабалары тураһында мәғлүмәттәр туплап, хәтер һандыҡтарында һаҡлағандар. Шулай итеп, атай-олатайҙарының, туғандарының исемдәре телдән-телгә, быуындан-быуынға күсеп килгән. Улар үҙ шәжәрәләрен изге аманат итеп һаҡлаған. Ата-бабаларыбыҙ һәр кешенең үҙ ырыуын, нәҫел-нәсәбен ете быуынға тиклем белеүе мотлаҡ тип һанаған.

Бөгөнгө көндә лә үҙ нәҫелдәре менән тәрәндән ҡыҙыҡһынған уҡыусылар бихисап. Фәнни-ғәмәли конференция ла «Шәжәрәм – минең ғорурлығым» һәм «Мин, ваҡыт һәм туған тел» темаларына бағышланды. Был конференцияла ҡатнашҡан һәр уҡыусы анык маҡсат һәм бурыс менән бер тема өҫтөндә эҙләнеүҙәр үткәргән. Үҙ шәжәрәләрен яклап сыҡкан уҡыусылар архив материалдарынан мәғлүмәттәр туплаған, өйҙәрендә электән һаҡланып килгән фотоһүрәттәр, тыуыу, никахҡа инеү тураһында таныҡлыктар, хеҙмәт кенәгәләре, хәрби билеттар, наградалар тураһында таныҡлыктар, һуңғы йылдарҙа табылған документтарҙың күсермәләрен йыйған. Ауыл хужалыгы, район, ҡала архивтарында булған мәғлүмәттәр менән үҙҙәренең шәжәрәләрен тулыландырған. Уҡыусыларҙың һәр береһе шәжәрәләге исемдәргә, даталарға, йәшәгән урындарына иғтибарҙы йүнәлтте, туғандарына айырым туҡталды.



Автор фотоһы.

Рита Саматова шәжәрәһе менән таныштыра.

Ғаилә альбомдары, ырыуҙаштары тураһында мәғлүмәттәр тупланған брошюралар күргәҙмәһе лә булды.

«Мин, ваҡыт һәм туған тел» темаһына арнап фәнни эш яҙған уҡыусылар ҙа туған тел тураһында бик күп асыштар яһаған. Тел тураһында яҙған шағир, яҙыусылар, уларҙың әҫәрҙәре, мәкәл-әйтемдәр, Интернет селтәренән алынған ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр менән тыныштырҙылар. Үҙ-аллы алып барған эҙләнеүҙәр лә бай һәм йөкмәткеле ине, улар туған телде һакларға, тәрәндән өйрәнеүҙе дауам итергә өндәне. Туған тел йәшәһә генә милләт һакланасағын төрлө миҫалдар аша дәлилләнеләр.

Фәнни-ғәмәли конференция һуңында еңеүселәр билдәләнде. Еңеүселектә 12-се мәктәп уҡыусыһы Гөлназ Хафизова һәм 6-сы мәктәптән Илнара Зиннурова бүлеште. 8-се мәктәп уҡыусыһы Лиана Шәйморатова, 11-се мәктәптән Айгөл Исмәғилева, интернат-мәктәбенән Рита Саматова һәм 2-се мәктәп уҡыусыһы Эмил Һөйәндеков призерҙар булдылар.

Жюри ағзалары эштәрҙең йылдан-йыл тулыраҡ, ҡыҙыҡлыраҡ, дәлиллерәк булыуын билдәләп үтте, фәнни эштәрен тағы ла тулыландырырға, эҙләнеүҙәрен дауам итергә тәҡдим итте.